## Донъяла



**СЛОВЕНИЯЛА БЕРЕНСЕ МӘСЕТ ҺАЛЫНА.** Люблянда тәүге Ислам мәҙәни үҙәгенең нигеҙ ташы һалыу тантанаһы уҙғарылды. Унда меңләгән мосолман халҡы йыйылды. Шулай уҡ Словенияның премьер-министры Аленки Братушк ҡатнашты. RTV Словения телеканалы күрһә-теүенсә, был ҙур ҡорам бер нисә йорттан торасаҡ, 40 метр манараһы, уҡыу һәм спорт үҙәге, китапхана һәм ятаҡ буласаҡ. Ул өс йыл эсендә төҙөлөп бөтәсәк, 12 миллион евроға төшәсәк. Сумманың ҙур өлөшөн Катар хәйриәһе тәшкил итә. Ике миллион халҡы булған Словенияла - мосолмандар 2,5 процент. Словения - Югославияның элекке республикаһы, католицизмдан ҡала Ислам дине икенсе урында торһа ла, быға тиклем илдә мәсет юҡ ине. 1969 йылда мосолмандар мәсет төҙөү буйынса тәкдим яһағайнылар. Тик башта сәйәси, аҙаҡ ер алыу мәсьәләһенә бәйле ул әлегә тиклем тотҡарланып килде.

* * *



**ИНДОНЕЗИЯЛА ӨСӨНСӨ ЙЫЛ ИНДЕ МАТУРЛЫҠ БӘЙГЕҺЕ УҘҒАРЫЛА.** Быйыл ярышта 137 илдән дәғүәсе ҡатнашты. Шуларҙың 18-се генә финалға килеп етте.

Был бәйгенең үҙенсәлеге шунда, ҡыҙҙар һижапта, уларҙың бите һәм бармаҡтары ғына күренә. Баһаламасылар уларҙың тышҡы ҡиәфәтен, кейемен генә түгел, ә дини ғилемен, Ҡөрьәнде матур итеп уҡыуҙарын, мәғүләмәтлелеген дә баһалай. Быйыл Нигерия ҡыҙы Обабийа Аиша Ажибола еңеүсе булды. Үҙенең исемен ишеткән саҡта ҡыҙ күҙ йәштәрен тыя алманы.Уның әйтеүенсә, был ярыш - исламдың матурлығын күрһәтеү сараһы. "Ул тышҡы матурлыҡты ғына түгел, ә эске матурлыҡты ла баһалаған донъялағы берҙәнбер конкурс!" - тине еңеүсе ҡыҙ. Таж менән ҡуша Аишаға Хаж ҡылыр өсөн 2200 доллар аҡса ла тапшырылды. Киләһе бәйге 2014 йылда Брунейенда үткәреләсәк.

* * *

Францияла, Страсбург эргәһендә тәүге француз-төрөк ҡалаһы төҙөләсәк. бында имамдар уҡыясаҡ, фәндәр ғәрәп телендә уҡытыласаҡ. Төркиә ун биш миллион евро инвестициялай. Францияла ла тыуып үҫкән мосолмандарҙы уҡытыу маҡсат итеЛә. Француз матбуғаты быны төрөк хөкүмәте диаспорала үҙенең йоғонтоһон һаҡларға ынтыла, тип баһаланы. Ә бында уҡырға килергә теләүселәрҙең һаны бик күп. Ислам динен тотоусылар Францияла һан буйынса икенсе урында, ә уны тотоусыларҙың арта барыуы буйынса беренсе урында тора.

## Ғилем һәм ғәмәл

# ИСЛАМДА ҘУР ҺӘМ БӘЛӘКӘЙ ГОНАҺТАР



Лилиә СИРАЕВА

Аллаһы Тәғәлә беҙгә Изге китаптары һәм пәйғәмбәрҙәре аша һаулығыбыҙға, тирә-яҡ мөхиткә, башҡаларға зыян килтерерлек ғәмәлдәрҙән тыйған. Изге Ҡөрьән китабында асыҡ билдәләнгән ҡағиҙәләрҙән тайпылыу - гонаһ. Гонаһҡа батҡанда беҙ бөгөнгө тормошобоҙға ғына зыян килтереп ҡалмайбыҙ, Тамуҡка ла әләгеүебеҙ бар.

**Исламда гонаһтар ҙур һәм бәләкәйгә бүленә.**

*Ҙур гонаһтар:*

1. Күп илаһтарға ышаныу, тораташтарға һәм башҡа һындарға табыныу. Был - иң ҙур гонаһтарҙың береһе. Аллаһты кемгәлер тиңләгән, уның барлығын шик аҫтына ҡуйғандарҙы Тамуҡтың иң аҫҡы ҡатында һынауҙар көтә (Исламды өйрәнеүселәр билдәләүселәрҙең ҡасан да булһа унан ҡотолоуы мөмкин, әммә иң аҫтағылар мәңгелеккә шунда ҡаласаҡ).

2. Тәртипле ҡатын-ҡыҙ хаҡында ялған һүҙ һөйләү. Уны аҙғынлыҡта ғәйепләү. Был гонаһ йыш ҡына ғаиләләрҙең тарҡалыуына килтерә, балаларҙың ҡатындың иренән булыуын шик аҫтына ҡуя.

3. Динле кешене үлтереү. Хоҙай Тәғәлә ғәйепһеҙ кешеләрҙе үлтереүҙе бөтөнләй тыйған.

4. Һуғыш яланынан ҡасыу. Мосолман үҙенең динен, ватандаштарының намыҫын, мөлкәтен һаҡларға һәм яҡларға бурыслы.

5. Етем, үҙен яҡлай алмаҫлыҡ кешенең мөлкәтенә ҡул һуҙыу.

6. Мәккә ҡалаһы янында ниндәй ҙә булһа тыйылған эштәр менән булышыу. Бындай урындарҙа мосолмандар тормоштоң асылы тураһында уйланырға, гонаһтарын ғәфү итеүҙе, һорап, Хоҙайға мөрәжәғәт итергә тейеш.

7. Хаталарыбыҙҙы Аллаһы Тәғәләнең ғәфү итеренә өмөтләнеү һәм гонаһ ҡылыуыңды белә тороп та туҡталмау.

8. Аҙғынлыҡ, гомосексуализм, алдашып шаһит булыу, проценттарға йәшәү, спиртлы эсемлектәр ҡулланыу, сусҡа итен, үләкһә ашау.

Үләкһә ите тип ҡайҙан килеп сығыуы билдәһеҙ булған ит һанала. Малды һуйғанда бөтә ҡағиҙәләрҙе лә үтәүҙәренә тулыһынса ышанған осраҡта ғына был итте ашарға ярай. Малды мосолман һуйған булһа, бигерәк тә яҡшы.

Үрҙә билдәләп үтелгәндәрҙән тыш, тағы ла бик күп тыйыуҙар бар. Әгәр Аллаһы Тәғәлә беҙҙе яҡлауынан ҡалдырмаһын, фәрештәләр шайтан ҡотҡоһонан аралаһын тиһәк, бөтә был тыйыуҙарҙы ла белеп, аңлап, уларҙы үтәргә тейешбеҙ.

Түбәндәгеләр ҙур гонаһтар исемлегенә инмәй, әммә уларҙан да тыйыларға кәрәк.

1. Көнкүреш эштәрендә ҡулланылған аттарҙың һәм ишәктәрҙең итен ашау, ләкин мал һуйыу өсөн махсус һимертелгән булһа - мөмкин.

2. Ирҙәргә ебәк кейем кейеү, алтын һәм башҡа биҙәүестәр тағыу. Балдаҡ кейергә мөмкин, әммә алтынды түгел, көмөштө генә. Балаларға ниндәй ҙә булһа амулет тағып, уның мөғжизәле йәки ниндәй ҙә булһа көскә эйә булыуына ышаныу тыйыла. Яҙылған доғаларҙы тағып йөрөргә ярай, әммә һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнең генә ярҙамына, ҡөҙрәтенә өмөт итергә мөмкин.

3. Алдау, ҡурҡытыу менән нәмәне лә булһа һатыу, алыу. Урланған әйберҙе һатыу, шулай уҡ сусҡа итен, спиртлы эсемлектәр, уларҙан эшләнгән аҙыҡтарҙы һатыу тыйыла. Мәсеттә лә бер нәмә лә һатылырға тейеш түгел. Кешене эшкә алыр алдынан уның менән эштең хаҡы тураһында һөйләшеү - мотлаҡ.

4. Ҡәберҙәргә ултырыу тыйыла. Күләгә беткән урынға, рөхсәтһеҙ ике кешенең араһына ултырырға ярамай.

5. Өс кеше булған урында икәүләшеп шыбырлашыу, бер кеше аңламаған телдә һөйләшеү тыйыла.

6. Үҙеңдең, башҡаларҙың тәненә татуировкалар эшләү тыйыла. Ҡатын-ҡыҙҙар тәнгә һылашып, үтә күренеп торған кейем кейергә тейеш түгел (сит кешеләр булғанда ҡатын-ҡыҙ шәриғәт буйынса кейенә, уның йөҙө һәм ҡулдары ғына асыҡ ҡалырға тейеш.

7. Зыяратта, портрет, ут, кеше алдында, ҡояш байыған мәлдә намаҙ уҡыу тыйыла.

8. Йома, байрам көндәрендә өҫтәмә ураҙа тотоу һәйбәт түгел. Шулай уҡ йыл буйына ураҙала булырға ла ярамай.

9. Исламда кеше тураһында насар һүҙҙәр һөйләү, кешене кәмһетеү, алдау, ғәйбәт һатыу тыйыла.

10. Аллаһы Тәғәлә йәне булған бөтә нәмәне лә утта яндырып интектереүҙән, атырға өйрәнгән ваҡытта сәп урынына ҡулланыуҙан тыя. Һуғыш ваҡытында дошмандарҙың ҡатындарын, балаларын үлтереү, мәсхәрәләү ҡәтғи тыйыла. Ҡыҙыҡ өсөн генә һунар итергә ярамай. Шулай уҡ тик торғандан, һеҙгә бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс менән янамаған ағыулы бөжәктәрҙе, йыртҡыстарҙы үлтереү тыйылғандар иҫәбенән.

12. "Кесе туғандарыбыҙ"ҙы - эттәр булһынмы, әтәстәрме - ҡыҙыҡ өсөн генә һуғыштырыу, һөсләтеү ярамай.

Әлбиттә, был исемлектәргә ингән тыйыуҙар тулы түгел. Мосолманмын тигән кеше Ҡөрьәнде, Хәҙистәрҙе, Ислам дине ғалимдарының китаптарын мотлаҡ уҡырға, өйрәнергә, аңларға тейеш. Беҙ һәр ваҡыт белемебеҙҙе арттырырға бурыслыбыҙ.

Һәр бер гонаһ кешенең күңелен бысрата, ҡоторта, Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәтенән, яратыуынан алыҫлаштыра. Шуға күрә һүҙҙе генә түгел, көндәлек тормошта ла мосолман булыу өсөн белемде арттырырға, бәләкәй һәм ҙур гонаһтарҙан алыҫ торорға кәрәк.

### "КҮРӘҘӘСЕГӘ БАРМА - БАШЫҢА БӘЛӘ АЛМА!"

Хәҙер күрәҙәселәр менән донья тулған, аҡсанды сығарып һалған хәлдә, улар һинең үткәненде, киләсәгенде әйтеп бирәсәк, хатта һинең менән буласаҡ ҡайһы бер кире күренештәрҙе үҙгәртергә лә вәғәҙә итергә күп һорап тормайҙар, әлбиттә, был хеҙмәт өҫтәмә хаҡ түләгән осраҡта күрһәтелә. Уйлап ҡарағыҙ - күрәҙәселәргә кеше үҙенә урын таба алмағанда, кемгә лә булһа эс серен һөйләгәһе килгәндә, ҡайғырғанда, аптыранғанда килә. Күрәҙәсе - яҡшы психолог, былай ҙа аптырап, күңеле түгелергә генә торған кешене рәхәтләнеп алдай, саҡ ҡына өмөт уята. Ҡыҫҡаһы, кеше нимә ишетергә теләй - шуны һөйләй.

Бигерәк тә "күрәҙә менән шөғөлләнергә төшөмдә фәрештәләр өйрәтте, фәрештәләр көндөҙ ҙә килеп китә, кәңәш бирә" тигәнерәк мәғәнәлә халыҡты алдаусылар аптырата. Күҙҙәрен йомоп, ҡулдарын Изге китабыбыҙ - Ҡөрьәнгә ҡуйып "мәғлүмәт йыйыусылар" бөтөнләй иҫте китерә. Белемһеҙ кешеләр бындай күрәҙәселәргә айырыуса ышана, сихырсыны бөйөк кеше итеп ҡабул итә башлай. Ә динебеҙҙе саҡ ҡына өйрәнгән кеше лә белә - Исламда күрәҙәселек итеү ҙур гонаһ һанала. Шарлатандар алдаҡ эштәренә динде ҡыҫтырып ниндәй гонаһҡа батҡандарын әллә белмәй, әллә белеп тә алдашыуҙарын дауам итә. Мосолман дине менән күрәҙәселек бер ваҡытта ла йәнәш булмаған, динле кешеләр бер ваҡытта ла күрәҙәселәргә мөрәжәғәт итмәй, үҙҙәре был гонаһлы эш менән булышмай.

Классик күренеште алып ҡарайыҡ. Күрәҙәсегә килгән 20-25 йәштәрҙәге ҡыҙҙы мөхәббәт, ғаилә ҡороу, эш табыу кеүек мәсьәләләр ҡыҙыҡһындыра. Күрәҙәсе быны аңлап тора, әлбиттә, һәм һөйләй башлай: "Тиҙҙән кейәүгә сығасаҡһың, балаң буласаҡ, әлегә ике егет араһынан берәүһен һайлай алмай йонсойһоң, һине яратҡаны - ҡара кейем кейә, дуҫ, ҡыҙҙарың араһында көнләшеүселәр бар, ниндәйҙер яҡын кешең ауырый" һәм башҡалар, һәм башҡалар. Әлбиттә!!! Был йәштәге бөтә ҡыҙҙар ҙа кемгә лә булһа ғашиҡ, кемделер оҡшата, уларҙың мөхәббәте бар һәм, әлбиттә, ҡыҙҙың кейәүгә сығыу ихтималлығы ла, 100 үк булмаһа ла, 99 процент. Ә бына ҡара кейем киймәгән ир-егет бармы икән? Дуҫ ҡыҙҙарың араһында ла һинең ниндәй ҙә булһа сифатыңа һоҡланыусыларҙың, хатта көнләшеүселәрҙең дә булыуы ихтимал. Бындай ғына "асыштар"ҙы үҙегеҙ ҙә белеп тораһығыҙ.

Күрәҙәсенә һынар өсөн яуабын белгән һорауҙар бирә башлаһағыҙ, ул: "Нимәгә мине һынайһың, миңә ышанмаһаң, кәрттәрем дөрөҫөн һөйләмәйәсәк, уй, ҡалай һинән ҡара көстәр килә!" - тип, тиҙ генә шымалап та ҡуясаҡ.

Исламда астрологтар, күрәҙәселәр, сихырсыларға мөрәжәғәт итеү тыйыла. Һине тормошта нимә көтөүен, кемде осратасағыңды тик Аллаһы Тәғәлә генә белә, шуға ла сихырсыларға ышаныу - мәғәнәһеҙлек. Әгәр кеше күрәҙәсегә барып, киләсәк хаҡында ниндәй ҙә булһа һорауға яуап табырға тырышһа, уның доғалары 40 көн буйына ҡабул ителмәйәсәк. Был Исламда асыҡ аңлатылған "йә, бәлки" тип шикләнергә урын ҡалмаған. Мосолман бер ваҡытта ла Аллаһы Тәғәлә тыйған ғәмәлдәр менән булашмаясаҡ.

Ысынлап та, ҡайһы ваҡытта шарлатандар һөйләгән һүҙ дөрөҫкә сыға, тик был ҡайһы бер сихырсыларҙың шайтан менән ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәттәрҙе булыуын һөйләй. Ендәр күп мәғлүмәтте тиҙ һәм оҫта итеп таба, ҡуллана белә. Ҡай саҡ улар кешеләрҙе ышандырыу өсөн аҙ ғына булһа ла дөрөҫтө һөйләп ҡуя, тик күберәген алдаша.

Шулай уҡ шайтандар кешенең йөрәгенә шик һалыу, насар хәбәрҙәр менән ҡотон алыу менән дә мауыға, хатта, шиктәре менән йонсоп, кеше ауырыуға һабыша.

Һәр ваҡыт иҫегеҙҙә тотоғоҙ - донялыҡта Аллаһы Тәғәлә генә бөтә нәмәне лә белә. Унан да ҡөҙрәтлерәк бер ниндәй көс тә юҡ.